***Фәнзил САНЪЯРОВ,***
***филология фәндәре кандидаты***

# Халҡыбыҙҙың аҫыл улы



*Әхмәҙи Таһир улы Ибраһимов*

Замандашыбыҙ, милләтебеҙҙең күренекле аҡыл эйәһе, фәйләсүфе, халыҡ яҙыусыһы, академик Ғайса Хөсәйеновтың ошондай ҡанатлы һүҙҙәре бар: “Һәр бер шәхес — үҙе бер оло яҙмыш, ғәжәйеп бер эске донъя ул. Һәр кеше — үҙенсә ҡабатланмаҫ уникум, берҙән-бер...” Шөкөр, халҡымдың йөҙөк ҡашы булырҙай аҫыл ирҙәре, милләткә рухи көс — кәр бирер, бөгөнгөнөң болғауыр һәм ауыр заманында ил таяныр ирҙәребеҙ бар. Халыҡ әүәлдән ундайҙарға күҙ төбәп торған. Әйтер һүҙе, ҡылыр изге ғәмәлдәре менән аҫыл ирҙәр милләтте үҫтергән, уның фекерләү кимәлен тәрәнәйткән, донъяға ҡарашын, офоҡтарын киңәйткән. Ҡеше шәхесен, ошо феноменды өйрәнгән ғалимдар ундай заттарҙы элитар шәхес тип атай.

Сер түгел, бөгөн башҡорт оло һынау алдында ҡалды. Үҙенең йәшәйеш ҡанундары, фекерләү үҙенсәлектәре, тормош ҡороуы менән халҡыбыҙ әүәл-әүәлдән коллективист. Беҙгә бергәләп ойошоп йәшәү, хеҙмәт итеү, ырыусылыҡ, ерҙәшлек рухы хас. Шуға ла халҡыбыҙ уҙған быуат башындағы инҡилап — үҙгәрештәрҙе үҙенеке һымаҡ ҡабул итте, колхозлашыуға мөкиббән бирелде. Шул уҡ быуат аҙағында көтмәгәндә колхоздар тарҡалғас, йәшәү мәғәнәһе бөткәндәй, донъя ҡыҙығы ҡалмағандай хис итте. Ырыусылыҡ рухы бер-береңдән өҫтөнлөктө инҡар итә. Эшҡыуарлыҡ һәләттәрең булһа ла, һин ошо түңәрәктән сыға алмайһың, дөйөм фәлсәфәне яҡлайһың. Фермерлыҡҡа, эшҡыуарлыҡҡа тотоноп, апарыу хәлләнеп, аҙаҡ ҡул һелтәгән тиҫтәләрсә ирҙәребеҙ булыуын беләбеҙ. Иманым камил, бөгөн халҡыбыҙҙы тик яңы ҡатлам — милли буржуазиябыҙ формалашып ҡына рухи һәм иҡтисади көрсөктәрҙән ҡотҡара аласаҡ. Сал тарихтан шул мәғлүм: бер Исмәғил Тасимов компаньондары менән тауҙай эштәр башҡарған, милләтебеҙ үҫешенә баһалап бөткөһөҙ өлөш индергән. Бөгөнгө шарттарҙа, әлеге хәлебеҙҙә беҙ үрҙә һөйләгән

элитар шәхестәребеҙ бик кәрәк. Улар үҙҙәренең фекерләүе, донъяға ҡарашы, эшмәкәрлеге менән башҡаларға таяныс булыр, рухтарын күтәрер, иртәгә ышаныс уятыр ине. Ә халҡыбыҙға, зыялыларыбыҙға алдынғы шәхестәребеҙҙе күрә һәм күтәрә белергә кәрәктер.

Ифрат бай тормош тәжрибәһе туплаған, һоҡланғыс хеҙмәт юлын үткән, донъяның әсе-сөсөһөн үҙ елкәһендә буйтым татыған, ауырлыҡтар алдында бер ваҡытта ла баҙап ҡалмаған, ил хәстәре, халыҡ ғәме менән йәшәгән, кеше тип йәне өҙөлгән, берҙән-бер һәм уникум шәхестәребеҙҙең береһе хаҡында әйтер һүҙебеҙ. Ул — абруйлы етәксе, билдәле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Әхмәҙи Таһир улы Ибраһимов.

## Ғәзиз ерем, тыуған тупрағым

Үҙ һөнәре буйынса инженер һәм хоҡуҡ белгесе Әхмәҙи Ибраһимов туған теле — башҡорт теленең бар нескәлектәрен, художестволы әҙәбиәттең эстетик ҡанундарын, һүҙ сәнғәте серҙәрен яҡшы тойомлаған зыялы заттарыбыҙҙың береһе. “Сапыҡ: ауыл тарихы һәм шәжәрәләре” (Өфө, ДУП: “ГРИ Башҡортостан”, 2006. — 200 б.) китабында автор былай тип яҙа: “Сапыҡ ауылы — беҙҙең тыуған төйәгебеҙ һәм тәүге тәпәй баҫҡан еребеҙ, тормошобоҙҙоң һәм ғүмеребеҙҙең нигеҙе, ятраҡан һәм хөрмәт иткән изге тупрағыбыҙ! Ул ата-бабаларҙың беҙгә ҡалдырған ҡомартҡыһы, изге ере, шатлыҡ һәм бәхет, ҡайғы һәм хәсрәт тойғоһон кисергән һәр беребеҙҙең, иҫтән сыҡмаҫлыҡ Башҡортостаныбыҙҙың бер биҙәге. Ауылдан сығып китеүемә тиҫтә йылдар үтһә лә, бала саҡтарым, беҙ һыу ингән һәм ат йөҙҙөргән Ҡәкеруй, Эйек йылғалары, тәбиғәттең хозур урынында төпләнгән ауылым, уның һәр өйө, һәр ағасы, эшсән, егәрле кешеләре, тәгәрәп уйнап үҫкән йәшел үләндәре, көмөш һыулы йылғалары, бесәнлектәре һәм туғайҙары ғүмерем буйына күңелем түрендә һаҡлана. Ауылдаштарым уңышы — минең уңышым, уларҙың ҡайғыһы — минең ҡайғым”. Өҙөктөң ифрат бай һәм һығылмалы теле, художестволы стиленең күркәмлеге, фекер тығыҙлығы иғтибарығыҙҙы йәлеп иткәндер. Күңел түренде, эске донъяңды ихлас асып һалыу, хис-тойғоларыңды һис тартыныуһыҙ башҡалар менән уртаҡлашыу теләге — ғәзиз ереңде, тыуған тупрағыңды ихлас ятраҡанда ғына тыуалыр ул!

Илһөйәрлек тойғоһо менән һуғарылған, тәрән тулҡынланыу хистәре менән яҙылған был ихлас юлдарҙың авторы Әхмәҙи Таһиров Күгәрсен районының гүзәл тәбиғәтле, йәйрәп ятҡан Бәйембәт яландары, көмөштәй һыуҙарын талғын ғына ағыҙып, мәңгелек йырын тынмай йырлаған Ҡәкеруй йылғаһы, ауыл осондағы ап-аҡ ҡайындары, Түңәрәккүл, Сәскәгүл (исеме ниндәй бит!), Яланҡыуаҡ буйҙары менән хайран итер изге төйәге Сапыҡта 1955 йылдың 14 июнендә донъяға килә. Ауылдағы иң абруйлы, хеҙмәт һөйөүсән, үтә итәғәтле, иманлы заттар Таһир һәм Рабиға Ибраһимовтарҙың (урындары йәннәттә булһын) береһенән-береһе зиһенле һәм уңған балалары — Зәйтүнә апаһы, Мөхәммәт, Рәсүл, Йосоп, Исмәғил ағалары артынан төпсөк Әхмәҙи күҙгә күренеп күтәрелә, иман һәм мәрхәмәт менән сорналып, ҡул араһына кереп бара. Өлкәндәрҙән айырмалы, Әхмәҙи нығыраҡ тәбиғәткә ынтыла, атаһына эйәреп, тәүҙәрәк Еректе буйҙарын, аҙаҡ Түңәрәккүл, Сәскәгүл тарафтарына килеп сыға. Ҡыҙыҡһыныусан күңеле Таһир олатайға тынғылыҡ бирмәй:

— Атай, ниңә Сәскәгүл тип атайҙар?

— Ана, күрәһеңме, улым, Ҡәкеруйҙы сығып, Эйек йылғаһы буйына төшһәң, һары сәскәләргә күмелгән һыу бар. Элек ул Эйектең ҡолағы булған. Ошо ҡолаҡты атай-олатайҙар Сәскәгүл тип атаған, — ти атаһы башынан һыйпап.

Һе! Йылғаның ҡолағы булалыр шул!..

Форсаты сыҡҡан һайын Әхмәҙи атаһынан ҡалмай эйәрер булды. “Тигеҙлек” колхозы рәйесе, һуңынан МТС мөдире, трактор бригадаһы механигы Таһир олатай арбаһына бесән сабып һалыр ине. Әхмәҙиҙең урыны шунда, етмәһә, дилбегә лә тотҡолай. Һорау артынан һорау яуа:

— Баҡсаһын аңлайым, “капитоны” нимә була ул?

— Ҡәкеруйҙы сығып бара бирһәң, ҡыуаҡлыҡтар башлана. Халыҡта был туғайлыҡты, Әхмәҙи улым, Ҡапитон баҡсаһы тип йөрөтәләр. Элеккеләр һөйләүенсә, туғайҙа Ҡапитон исемле урыҫтың ҙур баҡсаһы булған. Шунан киткән был исем. Белгең килһә, ҡарттар әйтмешләй, таштың да тарихы була, улым, — тип тамамлай атаһы хәбәрен.

Күпте белде, күпте хәтерендә ҡалдырып үҫте Әхмәҙи. Сапыҡ тирәһендәге барлыҡ ер-һыу атамалары күңеленә мәңге онотолмаҫ хәтирәләр булып уйылып ҡалды. Береһен дә онотҡаны юҡ. Ямангүл буйҙары, Зөлхизә тауы, Сағыл тауы, Шаһи ҡырлаһы, Ҡайын Ҡабаҡ, Йәғәфәр төйәге, Һандуғас туғайы — барыһы ла хәтерендә, күп сағын әле лә төштәрендә әйләнеп сыға тыуған төйәген, күҙ алдынан китмәй иркен ҡырҙар, сағыл, ауыл осондағы аҡ ҡайындар. Ни әйтһәң дә, ат туйған ерендә, ир тыуған илендә шул.

**Әхмәҙи Ибраһимовтың әйткәне:** — *Әй, бала саҡ! Ниндәй генә прозаик был тормоштоң ҡарыһыҙҙәре кеүек мөъжизәле сағын китап аша сағылдырырға тырышмаған. Әммә киләсәктә лә был темаға шағирҙар яңынан ҡайтасаҡ, композиторҙар көй яҙасаҡ. Бала саҡ! Кеше күңелендә онотолмаҫлыҡ бер моң булып, һәр кешелә яҡты тойғолар уятып, һүнмәҫлек бер иҫтәлек булып ҡала...*

Нисә йәштә булһаҡ та, беҙ һаман да күңелебеҙ төпкөлөндә яҡты бала сағыбыҙҙы һаҡлап ҡалабыҙ һәм сабый вайымһыҙлығы менән уның кире ҡайтыуына ышанабыҙ. Тыуған ерем, әсәйем-атайым, телем, милләтем, тамырым, тарихым һәм динем тигән төшөнсәләргә тоғро ҡалып, беҙ өмөт менән яҡты киләсәккә ынтылабыҙ. Тик бала саҡ ҡына мәңге сиселмәгән сер ҡиәфәтендә үткәндәргә өндәп ишара яһай. Әммә унда ҡайтырға юл да , сара ла юҡ... Ә бер уйлаһаң, юл да, сара ла бар икән. Уныһы хәтер тигәнең. Үҙең иҫән-һау саҡта зиһен-хәтереңә таянып, ата-олатайҙарҙан ҡалғанды ваҡытында теркәп барһаң, юл төшкән һайын изге тупрағыңа аяҡ баҫып торһаң, тыуған ер, ил тарихын фәнни нигеҙҙә өйрәнә башлаһаң, ир һәм ер бөтөнлөгө тыуа ла инде. Тап шулай эшләй эҙәрмән Әхмәҙи Таһир улы. Тарихи эҙләнеүҙәре ауылға нигеҙ һалыныу, башҡорт халҡының үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыу ваҡиғаларына, башҡорт ихтилалдары, кантонлыҡ идаралығы дәүерҙәрендә, 1812 йылғы Ватан һуғышы, граждандар һуғышы осорҙарына барып тоташа. Уйламаҫтан, Әхмәҙи Ибраһимов үҙе тарихсы булып тикшеренә башлай. Уның ысулдарын, материалдарын туплау, анализлау, үҙ ереңә ҡулайлаштырып системалау алымдарын үҙләштерә. Апарыу тәжрибә туплаған тарихсы төп иғтибарын 1941—1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышына, унда ҡатнашҡан яугир ауылдаштарының ҡаһарманлығын өйрәнеүгә йүнәлтә. Бының менән генә сикләнмәй, ауылдағы һәр араның, нәҫелдең шәжәрәһен төҙөй. Улары ғына ла 23-тән артып китә бит!

**Әхмәҙи Ибраһимовтың әйткәне:** — *Сапыҡ ауылы Күгәрсен районының уртаһында, Оло Эйек йылғаһының һул яғындағы киң үҙәндә, район үҙәге Мораҡтан Мәҡсүт ауылына, артабан Иҫәнғол ауылына илткән юл буйында урынлашҡан. Беҙҙә Әбей тирмәне, Дроздов тирмәне, Парлы тирмән тигән урындар бар. Ауылыбыҙға нигеҙ 1740 йылда һалынған булһа кәрәк. Сапыҡ 1721 йылда тыуған булырға тейеш. Өлкән улы Ишбулат 1746 йылда тыуған. Тарихсылар быуындар араһын 25 йыл тип иҫәпләгәнгә, 1721 йыл килеп сыға. Атаһынан айырылып, яңы ауыл һалған саҡта Сапыҡҡа 19—20 йәш булһа, ауылға нигеҙ 1740 йылдарҙа һалынған була...*

Ҡыҙыҡһыныусанлығы, тарихи ҡомартҡыларҙы, ҡарыһүҙҙәрҙе өйрәнеү теләге ташламаны Әхмәҙи Ибраһимовты. Һәр кем ауылы тарихын, ауылдаштары шәжәрәһен үҙаллы өйрәнергә йөръәт итмәй. Берҙән, был тынғыһыҙ эш үҙ көсөң иҫәбенә атҡарыла, ғилми эҙләнеүҙәрең крайҙы өйрәнеү музейҙарында, Өфө, Ырымбур, хатта Санкт-Петербург, Мәскәү архивтарында туҡтауһыҙ тикшеренеүҙе талап итә. Икенсенән, үҙ ваҡытың, күп осрағында ял-байрам көндәре, төнгө йоҡо иҫәбенә башҡарыла. Эшләгән төп эшең, хеҙмәтең бөтөнләй икенсе сферала булғанда, әйткәндәр икеләтә ҡатмарлана төшә. Әхмәҙи Ибраһимовтың билдәле журналист Фәтих Азаматов менән авторҙаш ижад иткән китабын эскерһеҙ һоҡланыу менән уҡып сыҡтым. Замандашымдың йөрәгендә тыуған ил, ер тойғоһо ни ҡәҙәр көслө булыуға таң ҡалдым.

**Әхмәҙи Ибраһимовтың әйткәне:** — *Сапыҡтарҙың шәжәрәләрен төҙөгәндә 1816, 1850 һәм 1859 йылдарҙағы ревизия материалдары, 1860—1895 йылдарҙағы метрика кенәгәләре, 1920 йылда ауыл хужалығын иҫәпкә алыу мәғлүмәттәре файҙаланылды. Һәр ғаиләлә булдым. Ауылдан ситтә йәшәгәндәрҙе күрец өсөн Күгәрсен районын гиҙҙем. Мәскәү һәм Ырымбурҙан алынған тарихи документтар, карталар күсермәһе файҙаланылды.*

Эйе, бындай ҡиммәтле хеҙмәт үҙенән-үҙе яҙылмай. Ауылдаштарының хуплап тороуы, район, республика етәкселәренең йылы ҡарашы, архив белгестәренең ихлас ярҙамы, эргәңдәгеләрҙең, ғаиләңдең аңлауы кәрәк — шунһыҙ мөмкин түгел. Уның ҡарауы ауылдаштарыңа, зат ырыуыңа, тарих фәненә ниндәйен дә ҡиммәтле йәдкәр ҡала! Заманында атай-олатайҙарыбыҙ шанлы тарихын, яу баҫтырылғандан һуң, ейәндәре бер саҡ уҡыр тип, ҡара ҡарғыштарын ташҡайҙарҙы соҡоп яҙыр булған. Әхмәҙи Таһир улы Ибраһимов киләсәк быуынға яҡты йәдкәр ҡалдыра: олатайҙарҙың батырлығы, тыуған ерҙең изгелеге, зат-ырыуының яҡты эҙҙәре тураһында ул хәтирәләр. Ундай йәдкәр мәңгелеккә ҡала.

## Милләтемдең алтын бағаналары

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның бик фәһемле яҙмалары бар: “...Борон беҙҙең башҡорт халҡында бер һәйбәт ғәҙәт булған: үҙен хөрмәт иткән, кешемен тигән һәр кем үҙ тоҡомон ете быуынға тиклем хәтерләргә тейеш. Йәғни ата-бабаларының кем, ниндәй кеше булыуын, уларҙың исемдәрен, кәсептәрен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, донъяға, тормошҡа ҡараштарын белергә; батырлыҡ, тоғролоҡ, намыҫлылыҡ һәм тура һүҙлелек менән тоҡомға, халыҡҡа эшләгән бөтә яҡшылыҡтарын түкмәй-сәсмәй быуындан-быуынға еткерергә; һәр бер йәш быуын, үҙ тоҡомоноң бөтә булған яҡшы яҡтарын йыйып,

шуға торош итерлек булып үҫергә тейеш булған". Белеүебеҙсә, был матур йола, ғөрөф-ғәҙәт халҡыбыҙҙа быуаттар буйы дауам итеп килә, ҙур-ҙур ырыуҙар күн, сафъян тышлы шәжәрәләрен күҙ ҡараһылай һаҡлап, быуындан-быуынға тапшыра килгән. Заманса кимәлдәге шәжәрә яҙыуҙар, ташҡа баҫтырыуҙар яңынан тергеҙелеп, тотош республика байрамдарына әүерелеп китеүе бөгөнгөбөҙҙөң ҡыуаныслы бер күренеше.

Ауыл, ер-һыу тарихы менән ҡыҙыҡһыныуы Әхмәҙи Ибраһимовты үҙенәнүҙе Ибраһимовтарҙың, артабан ауылдағы башҡа фамилиялы яҡташтарының шәжәрәһен төҙөүгә алып килде. Быныһы ғәжәп түгел: ауылдаштары төрлө фамилия йөрөтһәләр ҙә, тамырҙарын ауылдарына, нәҫелдәренә нигеҙ һалыусы Сапыҡ ҡартҡа тоташтырып ҡуя. Зат затына тарта. Тәү шәжәрәләре былай: Сапыҡ(1721) — Ибраһим аҙансы(1750) — Баймөхәмәт(1800) — Йәрмөхәмәт (1817—1855). Йәрмөхәмәттең Мөхәмәтлатиф (1844), Мөхәмәтшәриф (1848), Мөхәмәтзаман (1853) исемле улдары була. Ҡүҙәтеүҙәребеҙ шуны күрһәтә: аҙансы Ибраһим нәҫеленең төп һыҙатын билдәләр бер сифат бар: ул аң-белемгә ынтылыу, ғилем эстәү, халыҡты белемгә, иманға тартыу. Алтын дәүләт түгел, ғилем дәүләт, тип йәшәй аҙансы Ибраһим нәҫеле. Мәҫәлән, Мөхәмәтйән Мөхәмәтша улы Ибраһимов (1823—1907) Сапыҡта илле йылдан ашыу имамхатип, мәҙрәсәлә мөғәллим вазифаларын үтәй. 1852 йылдан указлы мулла. Улы Әхмәҙулла Ибраһимов (1889—1976) бик егәрле, хеҙмәт һөйөүсән булып үҫә. 1928 йылда колхозға 5 аты, 4 һыйыры, өс бүлмәле йорто менән инә, колхоздың келәтсеһе итеп тәғәйенләнә. Репрессияһын да, һуғыш йылдарында Магнитогорск заводында хеҙмәт армияһын да үтә, стахановсы булып, ике норма үтәй. Мөхәмәтша мулланың ейәне Әбделғәлим Ғүмәр улы дин юлында абруй-шөһрәт яулаған зат. Ул данлыҡлы Стәрлебаш мәҙрәсәһен тамамлай. Төплө дини белем ала, ғәрәп морфологияһын, синтаксисын, фарсы телен тәрән үҙләштерә. Халыҡ ихтирам итеп, Ғәлләм хәҙрәт тип йөрөтөр булған үҙен. Ғәлләм хәҙрәттең барлыҡ балалары, ейән-ейәнсәрҙәре уҡымышлы заттар, араларында инженер, иҡтисадсы, табип, уҡытыусы, технолог, геолог, юрист һ.б. бар. Фән кандидаттары, докторҙары тиҫтәнән ашып китә.

Ғәлләм хәҙрәттең (урыны йәннәттә булһын) улы — дәүләт эшмәкәре, педагог, яҙыусы Абдулла Ибраһимов хаҡында әйтеү кәрәк. Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы Ҡарауанһарай мәҙрәсәһен тамамлағас, 1914 йылда Ҡарғалыла уҡыта башлай. 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан автономияһы иғлан ителгәс, Ҡыпсаҡ кантоны мәғариф бүлеген етәкләй.1920 йылда БашЦИК составына һайлана, Социаль тәьминәт халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. 1920—1926 йылдарҙа Өфө һәм Мәскәү ҡалаларында юғары вазифалар биләй. 1932 йылда Белорет металлургия комбинаты директоры урынбаҫары. 1934 йылдан Бөтә Союз сәнәғәт академияһында уҡый. Ибраһим Ҡыпсаҡтың "Йәшелдәр", "Түңәрәк өҫтәл" китаптары, "Конкурс" повесы, "Трактор" кеүек хикәйәләре билдәле. 1937 йылда ғәйепһеҙгә хөкөм ителә. Беҙҙеңсә, Әхмәҙи Ибраһимовтың алда атап кителгән хеҙмәте халҡыбыҙҙың данлы улы Абдулла Ибраһимовтың исемен мәңгелештәреү яғынан да бик әһәмиәтле. Ошо рәүешле Ибраһимовтарҙың бик күп нәҫел ебен тағатырға мөмкин булыр ине. Һәр ҡайһыһында милләтебеҙ өсөн янып йәшәгән ул һәм ҡыҙҙарыбыҙҙың исем-шәрифтәрен күреп, форсат булһа, данлы тарихҡа ҡағылып уҙыр

инек, сөнки Ибраһимовтар нәҫеле ысын мәғәнәһендә милләтебеҙҙең алтын бағанаһына бәрәбәр зат ул.

Ә хәҙер геройыбыҙ Әхмәҙи Ибраһимовтың үҙ нәҫел шәжәрәһенә күҙ һалайыҡ. Ул түбәндәгесә: Сапыҡ — Ибраһим аҙансы — Мөхәмәтша — Ҡинйәғәле (1849) — Тайып (1876—1918) — Таһир (1904—1983), бер туғандар: Мөхәмәт (1944), Рәсүл (1947), Йосоп (1949—2005), Исмәғил (1952—1973), Әхмәҙи (1955). Ҡинйәғәле олатайҙан киткән шәжәрә тармағы ла нәҫел-ырыуҙың йөҙөнә тап төшөрмәй, тағы ла сағыу буяуҙар менән һырлай нәҫел ағасын. Алтындың заты, яҡшының аты юғалмай, тигән боронғолар.

Таһир Тайып улы атайһыҙлыҡты иртә татый. Малай көйө генә йә аҡтарға, йә ҡыҙылдарға ылау ҡыуа. Йот йылдың әҙәм ышанмаҫ ауырлығын, ас-яланғаслығын үҙ елкәһендә татый. Әммә аҡыл-зиһенле, мәрәкәсел, йомарт булыуы арҡаһында йәп-йәш көйө ихтирам яулай. Бәйембәт яланында уҙған киске уйындарҙа итегенең үксәләре төшкәнсе бейей, Рабиға кеүек иң һылыу ҡыҙҙы үҙенә ҡарата. Уттай егет ҡыҙҙар йөрәгенә йәнә бер яҡтан ялҡын өҫтәй: ул ауылдың тәүге тракторсыһы! Яңы ғына ойошторолған “Тигеҙлек” колхозы үҙ итә тырыш егетте. Тракторсы, бригада механигы, бер нисә йыл колхоз рәйесе, ауыл Советы рәйесе кеүек вазифаларҙы ла һала иңдәренә. Ғаиләһе арта бара. Әҙелғужиндар затынан булған Рабиғаһы менән бик татыу йәшәйҙәр, итәғәтле ул-ҡыҙҙар үҫтерәләр.

1941 йылда һуғыш башланғас, бик ынтылһа ла, фронтҡа алмай ыҙалайҙар үҙен. Бронь бирелгән, етмәһә, һабан төшөп аяғы имгәнгән Таһир Ибраһимов Мораҡ баҙарында өс тапҡыр “облава”ға эләгеп, фронтҡа китмәк була. Райсовет рәйесе, кобураһын ҡапшап: “Тағы бер эләкһәң, атам да йығам!” — тигәс кенә баҫылғандай була. Ғүмере буйы колхозда, “Октябрь” совхозында көсө етәрҙәй төрлө эштәр башҡара. 1975 йылда Рабиғаһы вафат булғас, байтаҡ ғүмер яңғыҙы донъя көтә уҙаман. Хеҙмәтен баһалайҙар. Күп кенә юбилей миҙалдары, Маҡтау грамоталары менән бүләкләйҙәр үҙен.

**Әхмәҙи Ибраһимовтың һөйләгәне:** — *Атайым һәр ваҡыт матур кәңәштәр бирер, гел яҡшыға өйрәтер, иманлы булығыҙ, затыбыҙға оят килтермәгеҙ, тип ҡабатлар ине. Атайымдың һүҙе: “Дуҫтарыңды һайлағанда йә олораҡҡа, йә йәшерәккә ынтыл. Олораҡы һине өйрәтә, йәшерәккә үҙең кәңәш бирәһең!”*

Ололарҙың аҡыллы һүҙе, тормош фәлсәфәһе быныһы. Ниндәйен дә тәрән мәғәнәле аҡыл, халыҡ педагогикаһы ята уларҙа. “Олоно — оло итегеҙ, кәңәш алып йөрөгөҙ, кесене — кесе итегеҙ, кәңәш биреп йөрөгөҙ!” — ти атаҡлы “Урал батыр”. Минеңсә, Таһир олатайҙың аҡыллы һүҙҙәре һәр балаһына әйтелеп торғандыр, юҡһа, балалары береһенән-береһе тәрбиәле һәм иманлы булып үҫер инеме ни?! Ана бит, балаларының һәр береһе хаҡында айырым-айырым очерктар яҙып булыр ине, тим. Әлегә ҡыҫҡаса туҡталып үтеү менән сикләнәбеҙ.

Әйтәйек, Нәүбәһәр Ибраһимова Мораҡ педагогия училищеһын тамамлап, ғүмере буйы балалар уҡытты. Педагогик хеҙмәте “Башҡортостан мәғарифы алдынғыһы” билдәһе менән баһаланды. Бөтә балалары ла юғары белемле белгестәр. Зәйтүнә Таһир ҡыҙы Салауат төҙөлөш техникумын тамамлап, производствоға өйрәтеү мастеры булып эшләй. Өфөгә күскәс, заводта инженер була. Йәмәғәте Ғәзимйән Йәғәфәр улы менән ике ул үҫтерәләр. Ирек Итҡолов хоҡуҡ белгесе, Башҡортостан эске эштәр министры урынбаҫары дәрәжәһенә

тиклем үҫте. Илдар Итҡолов авиация институтын тамамлағас, физика һәм математика буйынса махсуслаша, фән кандидаты, доцент. БДПУ-ла декан, БР мәғариф министры урынбаҫары вазифаһына тиклем күтәрелде.

Мөхәмәт Ибраһимовтың тормош юлы, эшмәкәрлеге үҙе бер китаплыҡ. Совет Армияһы сафтарынан старшина дәрәжәһендә ҡайтҡан егет Салауат нефтехимия комбинатында аппаратсы булып эш башлай, 1979 йылда Өфө нефть институтының киске бүлегендә уҡып, инженер-химик һөнәренә эйә була. Ошо уҡ йылда яңы ғына төҙөлгән Мәләүез химия заводының ашламалар цехы начальнигы итеп күсерелә. Французлар менән хеҙмәттәшлек итә оҫта химик. Бындай заводтың СССР-ҙа ни бары өсәү генә икәнен күҙ алдына баҫтырһаҡ, сәғәтенә 112 тонна ашлама етештереүен дә өҫтәһәк, Ватан алдында коллектив һәм уның етәксеһенең героик хеҙмәте аңлашылыр. Артабан завод директорының производство буйынса урынбаҫары, Продукцияны дәүләт ҡабул итеү комитеты рәйесе булып хаҡлы ялға сыҡҡансы эшләй. Мөхәмәт Таһир улы һәм Дания ханымдың ҡыҙы Гүзәл Ибраһимова, улы Илшат республикабыҙҙа киң билдәле шәхестәр, абруйлы менеджерҙар.

Рәсүл Таһир улы ла ағаһы эҙенән китә. Салауат индустрия техникумын тамамлап, ошо уҡ ҡалала химия комбинатында механик булып эшләй. Затлы нәҫелдең данын бөтә Рәсәй кимәлендә Йосоп Таһир улы Ибраһимов (1949—2005) хаҡлы таныта. Ул Томск ҡалаһында йәшәгән. Ҡаланың торлаҡ-коммуналь хужалығы етәксеһе итеп тәғәйенләнә. 1992—1995 йылдарҙа Рәсәй Президенты эргәһендәге дәүләт хеҙмәте һәм идара академияһында белем ала. Үҙ эшен асып, ҡалала күп һанлы производство һәм социаль объекттар төҙөй, абруй һәм ихтирам ҡаҙана. Туғыҙ йыл Томск өлкәһе губернаторының төҙөлөш буйынса урынбаҫары булып эшләй. Данлы яҡташыбыҙҙың ғүмере, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, фажиғәле өҙөлә, тыуған иленә ялға ҡайтып килгәндә автокатастрофала һәләк була. Томск ҡалаһы халҡы мәрхүмде үҙ ҡалаларында ерләүҙе һорай. Рәсәй Хөкүмәте халҡыбыҙҙың данлы улын “Рәсәйҙә меценатлыҡты үҫтереү өсөн” алтын миҙалы менән наградалай. Юғары бүләкте Йосоп Таһир улы үҙе генә күрә алмай. Бөгөн Томскиҙа ике—өс юғары белемле балалары береһенән береһе яуаплы вазифалар башҡара, аталарының данлы эшен дауам итә.

Бер ҡасан да күрмәгән, таныш булмаған ҡәҙерле яҡташымдың яҙмышына ҡағылып, берсә тәрән борсолдом, берсә күңелем сикһеҙ ғорурлыҡ менән тулышты. Башҡорт халҡының ана ниндәйен олуғ заттары бар, сит-ят ерҙә хәләл көсө, фиҙакәр хеҙмәте менән буй етмәҫлек үрҙәр яулауы — милләтебеҙҙең рухи көсө, эске ҡеүәһе хаҡында һөйләмәйме ни?! Йәнә шуныһы уйға һала: ә ниңә халҡыбыҙ ундай заттарын үҙе иҫән саҡта белмәй, ололамай, республикабыҙҙың юғары наградаларына тәҡдим итмәй? Меңләгән башҡорт Себер тарафтарында фиҙакәр хеҙмәт итмәйме ни? Уйлай китһәң, башҡортобоҙ сит мәмләкәттәрҙә боронғо дәүерҙәрҙә олуғ әмир, сардар, йә булмаһа, Ҡол Ғәли кеүек атаҡлы шағир дәрәжәһенә күтәрелгән!..

Нишләйһең, Ибраһимовтарҙың йәнә бер ҡайғыһын яңыртабыҙ. Совет Армияһында өлгөлө хеҙмәт иткән ерендә Исмәғил Ибраһимов 1973 йылда һәләк була. Изге төйәге Сапыҡҡа алып ҡайталар, һуңғы хәрби хөрмәт күрһәтәләр һалдатҡа. Ауыр булды 1975 йыл Ибраһимовтар өсөн, ҡайғы-хәсрәт ҡабатҡабат ишектәрен шаҡып торҙо. Бала ҡайғыһын күтәрә алмаған Рабиға инәй

баҡыйлыҡҡа күсте. Һарайҙай иркен йортонда яңғыҙ ҡалған хеҙмәт ветераны Таһир олатай ауылдаштарына, балаларына һыйынды. Ярай нәҫелдәре затлы, шатлыҡта ғына түгел, ҡайғыла ла бер-береһенә терәктәр. Йәнә бер ышанысы — төпсөгө Әхмәҙийе әрме хеҙмәтен бер йылдан тултырасаҡ. Сабырлыҡ кәрәк.

## Хеҙмәт кешене шәхес итә

Отҡор, үтә зиһенле бала булды Әхмәҙи. Ҡыҙыҡһыныусанлығы, күпте белергә ынтылыуы мәктәп йылдарында тағы үҫеп китте. Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында, үҙ балаһын юғарыраҡ үҫтерәйем типме, ҡайһы бер ата-әсә балаларын русса уҡытырға ынтылды. Хәйер, был XIX быуат аҙағында күпләп башҡорт-рус мәктәптәре асылғас йәнләнеп киткәйне. (Минең тыуған ауылым Бишауыл-Уңғарҙа башҡорт-рус халыҡ училищеһы 1911 йылда асыла).

1962 йылда Сапыҡтан ике бала рус телендә уҡытыу алып барылған Ҡаранға уҡырға йөрөй башлай. Бишенсе синыфҡа Ҡаранға уҡырға килгән тиҫтерҙәре, ярайһы уҡ русса һөйләшеп йөрөгән, арифметика дәрестәрендәге әллә ниндәй “разность”, “делитель”, “числитель”, “знаменатель” һүҙҙәрен ҡулланып, таҡта алдында мәсьәләләр сискән Әхмәҙигә иҫтәре китә. Ә бер аҙҙан үҙҙәре лә өйрәнеп ала Сапыҡ балалары. Ул осорҙағы һәр егет кеүек, бер саранан да ситтә ҡалмай. Һәр синыфта староста, стена газетаһы өсөн яуаплы, комсомол активисы булды ул.

**Әхмәҙи Ибраһимовтың әйткәне:** — *Кеше һине ихтирам итһен өсөн үҙеңә ябай булырға кәрәк, бер ваҡытта ла һауаланмаҫҡа, кешеһенә ҡарамай, изгелек эшләргә кәрәк, тип уйлайым. Атайымдың һөйләгәне иҫемдән сыҡмай: һуғыш ваҡыты, иген йыйып алынған, әммә кеше ас. Балаларға булһа ла берәр кило ашлыҡ бирәйек, ти икән. Уполномоченный: “Ашлыҡ таратһаң, хөкөм иттерәм!” — тип янай. Үҙ ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, атайым халыҡҡа ярҙам ҡулы һуҙа. Кешегә саҡ ҡына ярҙам итә алһам да, күңелем тыныслана, көнөм бушҡа уҙманы, тип ҡыуанам!..*

Әхмәҙи Таһир улы Салауат индустриаль техникумында белем алып, техник-механик һөнәрен үҙләштерә. 1974—1976 йылдарҙа Совет Армияһында, стратегик ракета ғәскәрҙәрендә илебеҙ сиктәрен һаҡлай. Өлгөлө хеҙмәте өсөн ВЛКСМ Үҙәк Комитеты Почет грамотаһы менән бүләкләнә. Һалдат шинелен һалыу менән, “Сельхозтехника”ның Күгәрсен районы бүлегендә автомеханик булып эш башлай. Көн дә ни тура килә — шуға эләгеп, егерме саҡрым юл үтеп, Мораҡҡа эшкә йөрөй. Йонсоғас, берекмә етәксеһе Ш.С.Хәлитовҡа үтенес менән инә:

— Шмидт Салауатович, байтаҡ ҡына ватыҡ ултырған “Москвич” бар, шуны йүнәтеп алайымсы. Тик аҙаҡтан бер кемгә лә бирҙермәгеҙ!

— Һиңә тиклем дә тотоноп ҡаранылар, булмай ул. Металға ғына тапшыраһы ҡалған. Ярай, бик дәрт иткәс, ҡылан, — ти етәксе.

Тотона буш ваҡытында Әхмәҙи. Үҙ аҡсаһын да, ваҡытын да ҡыҙғанмай, кәрәк деталдәрен Мәләүез, Күмертау ҡалаларынан ташый. Аҙна — ун көн тигәндә тимер аты уйнаҡлап та тора. Тимер-томор, машина яратыуҙан килә оҫталығы. Йәнә килеп, механик Таһир улы бит! Ана, ҡайһылай килеп сыҡты: техникаға тығыҙ ваҡытында Ш.С.Хәлитов үҙе лә руль артына ултырғылай. Эшһөйәр механиктың абруйы күтәрелә, яуаплы эштәрҙе ышанып тапшыра башлайҙар. Ә бер аҙҙан берекмәнең юл хәүефһеҙлеге буйынса инженеры, өлкән инженер, “Сельхозтехника”ның район берекмәһе етәксеһенең техник хеҙмәтләндереү һәм

ремонтлау буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләйҙәр. Был осорҙа йәш етәксе эшенең ҡатмарлылығын һандар теле менән әйтәйек: районда 687 трактор, 314 комбайн, 255 йөк машинаһы иҫәпләнә. Шәкәр сөгөлдөрө — 2157, бойҙай һәм арыш — 24353, көнбағыш — 4590, картуф — 1908, йәшелсә 120 гектарҙа үҫтерелә. 1978 йылда район һәр гектарҙан 16,8 ц. ашлыҡ йыйып ала, дәүләткә 600 мең центнер иген һата. Хужалыҡтарҙа 5 мең башҡа яҡын эре мал аҫыралыуын да иҫәпкә алһаҡ, ул йылдарҙа ауыл хужалығының ни тиклем мөһим тармаҡ икәнен күҙ алдына килтереп булыр. Тап шул осорҙа етәксе характеры формалашҡандыр ҙа!

Ибраһимовтарға хас сифаты бар Әхмәҙиҙең. Ышаналар икән, аҡла. Иңдәреңә йөк ята икән, ирҙәрсә яуаплылыҡ менән үтә. Шуғалыр, Күгәрсен районы етәкселәре үҙенә бер-бер артлы юғарыраҡ вазифалар йөкмәтеп торҙо. 1984—1987 йылдарҙа ул ауыл хужалығы идаралығында баш инженер, ә бер-ике йылдан район “Агроснаб”-ы директоры. Эре хужалыҡтарҙың береһе — “Күгәрсен” совхозы етәксеһе булып та кешеләр күңелендә яҡты эҙ ҡалдырҙы ул. Район иҡтисадын, совхоз эшселәренең матди хәлен, юлдарҙы, социаль өлкәне үҫтереүгә күп көс һалды ваҡыт менән иҫәпләшмәгән Әхмәҙи Ибраһимов.

**Әхмәҙи Ибраһимовтың һөйләгәне: —** *Һуғыштан һуңғы осор балалары булһам да, халҡыбыҙҙың 1941—1945 йылдарҙағы фронт һәм тылдағы батырлығын бөтә йөрәгем менән аңлап үҫтем. Ауылда, үҙем эшләгән хужалыҡта фронтовиктарҙы, тыл батырҙарын күтәрергә ынтылдым. Үҙ көсөбөҙ менән Ибрай, Ураҡай ауылдарында һәләк булған яугирҙарға һәйкәл ҡуйҙыҡ. Мин ғүмерем буйы пленда булғандарҙы айырыуса ҡыҙғандым. Һуғыш тураһында һүҙ сыҡһа, улар өнһөҙ генә илар ине. Совет власы реабилитациялаһа ла, кешеләр уларға ҡаты бәғерле булды...*

Тыуған ерендәге тырыш хеҙмәтен район етәкселәре һәм яҡташтары юғары баһалай. Ә.Т.Ибраһимов район Советының 3 саҡырылышына депутат булып һайлана. Тынғыһыҙ хеҙмәтенә ҡарамаҫтан, 10 йыл район халыҡ суды заседателе була. Әйткәндәй, бындағы тәжрибәһе ярап ҡала: 2002—2005 йылдарҙа ул БР Президенты эргәһендәге Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара академияһында менеджер һөнәрен үҙләштерә. Әхмәҙи Ибраһимовтың тағы ла яуаплыраҡ, тулы ҡанлы тормош менән йәшәүе Өфө осоро менән бәйле. Ул 2001 йылдан алып, тиҫтә йылға яҡын Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай Секретариатының транспорт менән тәьмин итеү бүлеге мөдире. Һуңғы йылдарҙа Әхмәҙи Таһир улы Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтында социаль-иҡтисади үҫеш буйынса проректор вазифаһын ҙур яуаплылыҡ менән үтәй. Мәғарифты үҫтереү институты күҙ алдында яҡшы яҡҡа үҙгәрә, республикабыҙҙа абруйы йылдан-йыл арта, матди-техник базаһы нығына икән, унда Ә.Т.Ибраһимовтың да баһалап бөтмәҫлек роле бар. Хеҙмәттәштәре уны һәр нәмәлә үтә теүәл, пунктуаль, кешеһенә ҡарамай ихтирамлы, әйткәнен мотлаҡ үтәй торған етәксе тип баһалай.

— Әхмәҙи Таһир улын бик күптән беләм. Күгәрсендәр уны яуаплылыҡ тигән төшөнсәне яҡшы аңлаған, кешелекле етәксе, оҫта менеджер тип белә.

Ниндәй генә вазифала эшләһә лә, үҙенә тоғро ҡалды. Әхмәҙи Таһир улы әйтте икән — ул мотлаҡ үтәлер. Хужалыҡ-ара район пионерҙар лагеры асырға булғас, иң тәүҙә ул йоҡо корпусы төҙөттө. Хужалыҡ ысулы менән үҙ ауылында мәктәп һалдырып ҡуйыу, юлдар төҙөкләндереү, хатта ауылында “Байымбәт уйынын” ҡайтанан тергеҙеү ҙә уның эшмәкәрлеге менән бәйле. Дәүләт Йыйылышы —

Ҡоролтайҙа, бөгөн мәғарифты үҫтереү институтында беҙ уның тәжрибәһенә һәм эшһөйәрлегенә таянабыҙ, — ти Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты ректоры, сәйәсәт фәндәре кандидаты Р.Ғ.Мәжитов.

Эйе, хеҙмәт кешене шәхес итә. “Дандың төбө — хөрмәт, хөрмәт төбө — хеҙмәт”, — ти халҡыбыҙ. Бөтә зат-ырыуы кеүек, Әхмәҙи Ибраһимов бөтә аңлы ғүмере буйы ошо ҡиммәттәргә тоғро ҡалып йәшәй. Халҡыбыҙ, республика етәкселәре шуларға таянып баһалай үҙенең аҫыл улын. Тырыш хеҙмәте БР Президентының Рәхмәт хаты һәм дипломы, БР Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтайҙың, Күгәрсен район Советы Президиумының Рәхмәт хаттары менән баһаланды. Уға 1-се класс дәүләт советнигы чины бирелә. Замандашыбыҙ шул уҡ ваҡытта өлгөлө ғаилә башлығы. Йәмәғәте Эльвира Зыяитдин ҡыҙы менән балалары Руслан һәм Светлананы тәрбиәләп, кеше итте. Эльвира ханым “Башагропродукт” акционерҙар йәмғиәтенең өлкән бухгалтеры. Руслан Мәләүез кадет корпусын, РФ Эске эштәр юғары мәктәбен тамамлай, Өфө ДАИ полкы командиры урынбаҫары, милиция майоры. Светлана психолог, уңышлы менеджер. Халҡымдың ышанысы һәм таянысы Ә.Т.Ибраһимов һәр яҡтан өлгөлө шәхес. Шундай улдары булған халыҡ бөйөк һәм мәңгелек.

## Мин тормошто, кешеләрҙе яратам

**Әхмәҙи Ибраһимовтың әйткәне:** — *Йәш саҡта шундай башҡа һыймаҫ тамаша шаһиты булдым. Беҙҙең хужалыҡ етәксеһе ярҙамсылары менән ауылдаштарымдың ҡаҙ-өйрәген, һарыҡтарын ҡыуалатып, машинала тапатып йөрөнө — йәнәһе, иген баҫыуына керә. Инәйҙәрҙең ҡарғыш һүҙҙәре әле лә ҡолағымда яңғырай, йәнем өҙгөләнә... Үҙемдең дә ундай яһил етәкселәргә тарыған булды. 1966 йылдар тирәһе. Фрунзе исемендәге колхоз шәкәр сөгөлдөрөн ҡаҙып алған, көнө буйы йөрөп, көрәк менән ҡаҙып, өс көйәнтә сөгөлдөр йыйҙыҡ. Юл аша сыҡҡанда шундай етәксегә тап булып, барлыҡ мөлкәтебеҙҙе йөк машинаһына тейәп, фермаға оҙаттылыр. Социалистик байлыҡты урлағанбыҙ икән. Шәрғиә әбейем, инәйем ҡайтып кергәнсе үкереп илап килделәр. Иртәгәһен ерҙе ап-аҡ ҡар ҡапланы. Бала булһам да, күңелемдәге ҡар оҙаҡ ҡына иремәй йонсотто...*

Иманлы, мәғрифәтле заттан Ә.Т.Ибраһимов. Ҙур-ҙур вазифалар башҡарһа ла, кешеләргә ихтирам менән ҡараны. Юлда ауылдаштарын, ҡарт-ҡороно иҫәпләшмәй үтеп китмәне. Бер кемде лә ҡулдан килгән ярҙамынан ташламаны. Үҙе лә ауыр хәлгә ҡалғас, Сапыҡ халҡына һыйынды. Биш-алты йыл элек аварияға тарыны. Тән-йән яралары төҙәлә биргәндәй булғас, Сапыҡҡа ҡайтты.

— Алдығыҙҙа һис тә ғәйебем юҡ. Кем башҡаса уйлай, ғәфү итегеҙ, — ти уҙаман.

— Әхмәҙи ҡусты, бөтөрөнмә, беҙ үҙеңдән яман ҡайғырҙыҡ, һинең өсөн борсолдоҡ. Сапыҡ мәсетен дә бергәләшеп төҙөп бөтөрөрбөҙ әле, — ти ауылдаштар исеменән абруйлы ағайҙар. Мәсет һалыу ниәтеңде лә хуплайбыҙ, — ти улар. 2008 йылда ниәтен тормошҡа ашыра башлай Әхмәҙи Ибраһимов. Бөгөн Сапыҡта ҡыҙыл кирбестән, иҫ китмәле матур проект менән төҙөлгән иман йортонда эштәр тамамланып килә, яйы тура килеп, тантаналы шарттарҙа асаһы ҡала. Европа халҡы быдайын изге ғәмәлде меценатлыҡ ти. Әхмәҙи Ибраһимов өсөн әруахтарҙың йән тыныслығы, ауылдаштарының рухи ныҡлығы мөһим. Йәнә ки-

леп, Ибраһим аҙансы, Мөхәмәтйән, Ғәлләм хәҙрәттәрҙең дин юлындағы фиҙакәр хеҙмәтен данлаусы изге ҡорам да ул.

Ә.Т.Ибраһимовтың һәр ҡылған изгелеген берәмләп һөйләү маҡсатын ҡуймаһам да, ҡайһы берҙәрен урап үтә алмайым. Мәҫәлән, Еңеү көнө, “Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!”, “Бәйембәт уйыны”, шәжәрә, Хәтер көнө кеүек байрамдар унһыҙ үтмәй. Бындай изге ғәмәлдәр Әхмәҙи Ибраһимовтың башына ҡайҙан килә, тип уйлап ҡуяһың. Ауыл ҡарттары, инәйҙәр төрлөһө төрлө таяҡҡа таянып йөрөй. Берәүҙәр саңғы таяғын, икенселәр кәкере ағас ҡулайлаштыра. Бер ҡайтҡанында изге күңелле бәндә һәр береһенә матур, уңайлы трость бүләк итә. Күренекле офтальмолог Рәшит Искәндәров менән бергәләп өлкән ауылдаштарының һәр береһенә күҙлек хәстәрләй. Ураҙа, Ҡорбан ғәйеттәрендә лә сапыҡтар янында. Таҡыя, тәсбих, тәмле ризыҡтар ауылдаштарының күңеленә хуш килә.

Үҙ ауылында мәҙәниәт усағын дөрләтеп, яҡташтарының күңелен башҡорт эстрадаһы артистары сығыштары менән ҡыуандырып тора. Юнир Һағынбаев, Хәсән Усманов, Марсель Ҡотойов, Редик Фәсхетдинов кеүек йондоҙҙар әленән-әле Сапыҡта халыҡтың күңелен күтәрә. Был сараларҙы Әхмәҙи Таһир улы ҡыуанып ойоштора. Сапыҡтарҙың юбилейҙарын да ихтибарһыҙ ҡалдырмай киң күңелле Әхмәҙи Таһир улы. Шулай, Ғимран олатай байрамда ҡатнаша алмай, өйө ҡаршыһында инвалид коляскаһында ултыра икән. Уны күреп ҡалған Әхмәҙи Ибраһимов бара һалып, ҡулына бүләген тоттора. Икеһенең дә күҙҙәренән йәш тәгәрәй. “Аһ!” итә сапыҡтар! Ғөмүмән, “Әхмәҙи ҡайтҡан!” тигән хәбәр сыҡһа, ауылдаштары Таһир олатайҙың зәңгәр ҡапҡалы, йәшел түбәле, тирә-яҡҡа йәм биреп ултырған өйөнә ағыла башлай. Изге күңелле кешеләр һәр ваҡыт башҡаларҙы үҙенә тартып торған. Күңел-бәғерҙәре ҡата барған был заманда арабыҙҙа бөгөн дә ундайҙар барлығы сикһеҙ ҡыуандыра.

— Яҡташым Әхмәҙи Ибраһимов менән ғорурланып йәшәйем, — ти академик Марат Вәли улы Зәйнуллин. Ихтибарлы, ярҙамсыл ул. “Йомошоғоҙ юҡмы?” — тип үҙе алдан шылтыратып тора. Бөгөн ундайҙар һирәгәйә бара шул...

Бүләк иткән яңы китабына сатирик шағир Марсель Сәлим былай тип яҙа: “Тиҫтә йыллап Ҡоролтайҙа ултырып та душаһы ҡоромаған Әхмәҙи ҡустыма яҡын күреп”. Йәштәребеҙ ҙә йылы һүҙгә йомарт. Сенаторыбыҙ Л.С.Ғүмәрованың ярҙамсыһы Марсель Вәхитов: “Башҡорт аҡһаҡалының образын күргегеҙ килһә, Әхмәҙи ағайға ҡарағыҙ”, — тип яҙа. Ә.Т.Ибраһимов үҙе ошолай тип әйтеүҙе хуп күрә: “Ғүмер үтә лә китә, тиҙәр ине. Шуны аңлар йәшкә еттем. Ваҡ мәсьәләләр менән йәшәмәҫкә кәрәк, күңелдә көнсөллөк булмаһын, ул халыҡ ғәме менән тулһын. Үсләшеп, насарҙы уйлап йәшәһәң дә, ғүмер уҙа, әммә ундайҙарҙың яҡшаты түгел, яманаты ҡала. Кешенән яҡты нур ҡалһын ул!” Ана нindәй хәстәр менән йәшәй замандашыбыҙ Әхмәҙи Ибраһимов! Ғүмер артылышының тағы бейегерәк үрҙәрен яуларға, халҡыңа ихлас хеҙмәт итергә яҙһын, уҙаман! Оло Эйек һыуылай тулып, ҡайнап аҡһын шаулы ғүмер йылғаларың!

...Бик тиҙҙән зәңгәр күккә мөһабәт ҡуш манараларын һуҙған Сапыҡ мәсетенән Оло Эйек, Ҡәкеруй буйҙарына, Байымбәт яландарына, кеше күңелдәрен нурландырып, изге иман ауаздары яңғырар. Борон-борондан был изге тупраҡта илһөйәр, яҡты рухлы милләттәштәребеҙ көн күргән. Аҙансы Ибраһимдың моңло мәҡаме, быуат арауығын үтеп, оло бер ырыу булып таралған нәҫелен тағы ла гүзәлерәк, сыуаҡ иртәгәбеҙгә саҡырып торор. Шөкөр, быуындар бәйләнеше өҙөлмәй, нығый ғына бара.